**Әҙәбиәт һөйөүселәр иғтибарына!**

Хәйбулла үҙәкләштерелгән китапханалар фонды Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәтендә башҡорт һәм рус телдәрендә баҫылып сыҡҡан, муниципаль район аҡсаһы иҫәбенә һатып алынған яңы китаптар менән тулыланды.




Арҙаҡлы яҡташыбыҙ, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Республикабыҙҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы һәм күп һанлы әҙәби премиялар лауреаты Ҡәҙим Әбделғәлим улы Аралбаевтың «Седые ковыли» исемле китабына рус теленә тәржемә ителгән шиғырҙары, рубаиҙары һәм поэмалары индерелгән.




«Сыны Башкортостана в боях за Беларусь» китабы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Беларусь Республикаһында нацизмға ҡаршы һуғышҡан – оборона һуғыштарында ҡатнашҡан, партизан хәрәкәтенә ҙур өлөш индергән, республиканы дошмандан азат иткән яҡты иҫтәлеккә арналған. Беларусь һәм Башҡортостандың музей һәм архив материалдары, Белорусь ҡалалары һәм ауылдары өсөн азатлыҡ һуғыштары тураһында уникаль факттар тупланған.




Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына әҙерләнгән Зөһрә Ҡотлогилдинаның публицистик йыйынтығында Республикабыҙҙың 35 районында, сит ил һәм өлкәләрҙә – Төркмәнстан, татарстан, Ырымбур, Ҡурған, Силәбе һәм башҡа ҡалаларҙа – йәшәгән 115 һуғыш балаһының хәтирәләре урын алған.




Ризван Хажиевтың «Помнят Высокие Татры» повесында Бөйөк Ватан һуғышы осоронда фашист илбаҫарҙарына ҡаршы көрәштә ҡатнашҡан башҡорт разведчигы Вафа Әхмәҙуллиндың батырлығы сағылдырыла.




Ҡаһармандар юлы» исемле йыйынтыҡ фронтовик яҙыусыларҙың, шулай уҡ атай-олатайҙарының аманатына тоғролоҡ һаҡлаған ҡәләм оҫталарының 1812 йылғы Ватан һуғышынан махсус хәрби операцияға тиклемге ваҡиғаларҙы күҙ уңында тотҡан, яугирҙарҙың ҡаһарманлыҡ өлгөләрен тасуирлаған әҫәрҙәрен үҙ эсенә алған.



Билдәле яҙыусы Яныбай Хамматовтың «Алтын юлағым» исемле автобиографик романы өс китаптан тора: «Хәсрәтле бала саҡ», «Йылдар һәм юлдар», «Эҙләп табылған хазинам». Романда 1930 йылдан алып 2000 йылға тиклемге ваҡиғалар һүрәтләнә.




Күренекле яҙыусы Динис Бүләковтың әҙәби мираҫынан тәҡдим ителгән «Тыҡрыҡ башы – беҙҙең биләмә» китабына үсмерҙәр тормошо, ҡыҙҙар һәм малайҙар араһындағы дуҫлыҡ хистәре хаҡында ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс итеп яҙылған повесы һәм бер нисә хикәйәһе тупланған.

Шулай уҡ китапхана кәштәләрендә урын алған Тәлғәт Ғәлиуллиндың «Яҙмыш юлдары», Айгөл Йәмилеваның «Сынаяҡтағы донъя», Мәжит Ғафуриның «Ҡара йөҙҙәр=Черноликие», Хәйҙәр Тапаҡовтың «Йәшлеккә ҡайтыу» роман һәм повестары, балалар өсөн яҙылған Мәрйәм Бураҡаеваның «Илмәнтау мөғжизәһе» фәнни әкиәте, Әлфиә Әсәҙуллинаның «Кем булырға?» шиғырҙары, Әнисә Фәррәхованың «Ихатала кем хужа?» пьесалары әҙәбиәт һөйөүселәрҙең күңеленә хуш килер.

Ял минуттарын файҙалы үткәрергә teләһәгеҙ, китапханаға рәхим итегеҙ!